***Розалия СОЛТАНГӘРӘЕВА,***
***филология фәндәре докторы***

# Мәшһүр сәсән Байыҡ Айҙар рухына

Тәңренән бирелгән изге бурысты йөкмәп, йылдар буйы иңендә ил, тел, ер-һыу хәстәрен күтәреп, ғәҙеллек тигәнде онотормай, телдән төшөрмәй, тыныслыҡҡа янаған дошманды һиҫкәндереп, дуҫты елкендереп, яманды ҡурҡытып, яҡшыны ҡалҡытып ғүмер кисерә сәсән. Үҙе тураһында әйткән танытмала сәсән үҙ-үҙенә башҡа кешегә ҡарағанда ихлас талапсан һәм аяуһыҙ була. Һүҙ батыры ғына түгел, яу батыры ул, ил, ер именлеге хаҡына хәләл ҡанын түккән ҡаһарман да.

Туҡмалып та таҙ ҡалған,
Ҡаны ағып һаҙ булған,
Яуызды күрһә, ҡарйыған,
Йөрәгенән матҡыған,
Асыуҙа ҡайнап сыныҡҡан,
Уралда аунап ереккән,
Ҡанһыраған арыҫландай
Ҡаңғырып йөрөгән ҡартымын! —

тип таныштыра Байыҡ сәсән үҙен бөйөк Салауат менән. Әйткән антына тоғро ир көслө була, әйткән һүҙен уҡтай юнып төҙ атҡан сәсән ҡөҙрәтле була. Ҡаҙаҡ аҡындарын әйтештә еңеп, үҙ илен яҡлап йөрөгән Байыҡҡа Айҙар тип ҡушамат тағалар. Ғәййәр, шәп, аҫыл тигән мәғәнәләргә эйә ул!

«Байыҡ сәсән Златоуст өйәҙе Мырҙалар волосы Мәхмүт ауылында 1710 йылдарҙа Байназар тархан ғаиләһендә тыуған» (М.Буранғолов. Сәсән аманаты. Төҙ., баш һүҙ авт. Б.Байымов. Өфө: «Китап», 1995. 66-сы б.). Әммә Ә.З.Әсфәндиәров ревизия документтарына таянып яҙыуынса, Байыҡ Аблаев Мырҙалар волосының Монай ауылында 1734 йылда донъяға килгән. Һуңынан Аблаевтар ғаиләһе Мәхмүт ауылына күсә (А.З.Асфандияров. История сел и деревень Башкортостана. Уфа: «Китап», 2001. Т.9. С.107—108).

Сәсәндең тормошон, ижадын өйрәнгәндә тыуған, йәшәгән йылын аныҡлау ҡатмарлы булғанда уны тарихи даталарға бәйлелеге менән генә асыҡлап була, күрәһең. Уларҙың күбеһенең исем-аты, даны эпик әҫәрҙәрҙә, риүәйәт-йырҙарҙа сағыла һәм ил, тел яҙмышына мөһим өлөш индергән эштәре, ижады, ҡобайырҙары аша халыҡтың рәхмәтле хәтерендә теркәлеп уйылып ҡала...

Байыҡ һынын беҙ башлыса «Байыҡ Айҙар» эпик әҫәре буйынса күҙаллайбыҙ. Уны сәсән Ғәбит Арғынбаев (1856—1922) үҙе үк сәсән, ҡурайсы Ишмөхәмәт Мырҙаҡаевтан (1781—1878) отоп алған була (Ғилми архив. Ф. 3. Оп. 12/445, 192-се б.) һәм 1920 йылда Мөхәмәтша Буранғоловҡа һөйләп бирә.

«Бөйөк Салауаттың атаһы Юлай, уның атаһы Аҙналы менән бергә Әй буйын биләгән Байназар тархандың улы була. Байназар тархандың биш улы: өлкәне — Байыҡ, икенсеһе — Танып, өсөнсөһө — Тайып, дүртенсеһе — Ҡайып, бишенсеһе Танһыҡ була.

Үҙе сәсән булып, Байыҡ, атаһынан йәштән айырылып, ил гиҙгән» (М.Буранғолов. Сәсән аманаты. Өфө, 1995. 41—42-се б.). Өс туған — Байыҡ, Танып, Ҡайыптың Салауаттың атаһы Юлай менән бер яуҙа ҡатнашыуы, ике ағаһы яуҙа юғалғас, Байыҡтың ҡаҙаҡ араһына китеүе бәйән ителә «Юлай менән Салауат» ҡобайырында (Башҡорт халыҡ ижады. 3-сө том. Эпос. Төҙ., баш мәҡ. һәм аңл. авт. Н.Т.Зарипов. Өфө, 1982. 98-се б.). Юлайҙың ғәййәр боласы булыуы, яуҙа еңелгәс, ҡасып йөрөүе әйтелә. Шулай уҡ Салауатҡа тиклем ике балалы булыуы ла телгә алына:

Юлай яуҙы асһа ла,
Аҙаҡ түҙмәй еңелгән.
Ете йылдың ҡышында
Күп ауырлыҡтар күреп,
Ике балалы булып,
Һаман ҡасып йөрөгән
(Шунда уҡ. 97-се б.).

Ә инде Салауаттың тыуған йылын 1754 йыл тип танығанда, Юлайҙың тағы «бер яуҙа бер йыл артыҡ йөрөп ҡайтыуын» белгәндә, ул ваҡытта Салауат атлап киткән, һаҡаулап һөйләшкән бала була.

Юлай яуҙа дан алған,
Батшанан миҙал алған,
Түрә булып һайланған.
Юлай яуҙан ҡайтҡанда
Салауат та атлаған,
Ярым-ярты һаҡаулап
Һөйләшә лә башлаған
(Башҡорт халыҡ ижады. 3-сө том. 98-се б.).

Һәр хәлдә, бында Юлай Аҙналин менән Байыҡ сәсәндең яуҙа яуҙаш булыуҙары 1750—1756 йылдарға тура килә. Ғәҙеллек һаҡсыһының батыр яугир булғаны ла баҙыҡлана. «Байыҡ сәсән ике энеһе һәм Юлай Аҙналин менән Ҡараһаҡал йәки Батырша яуҙарында ҡатнашҡан, аҙаҡ — эҙәрлекләнеүҙәренән аңлашылғанса, батша ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышҡан яугир булырға тейеш» (Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 1-се том. Өфө, 1990. 323-сө б.).

1772 йылдарҙа, Крәҫтиәндәр һуғышы алдынан, Салауат батыр менән осрашҡанда Байыҡ ғорурланып:

Айҙар тигән атым бар.
Ҡулымдан ҡорал һалмаҫҡа
Илгә биргән антым бар! —

тип үҙен таныта.

Шулай итеп, әйтер һүҙен әйтер ғәййәр хис эйәһе лә, яугир антына тоғро зат та ул. Байыҡ Айҙар ил һаҡлап төрлө яуҙа ҡатнашҡан батыр ҙа, үҙ уйын ярып һалыр аһын да. Бола, яуҙарҙан һуң әҙерлекләүҙәр заманында Салауаттың атаһы Юлайҙы уның атаһы Аҙналы аҡлап алып ҡала алһа, Байыҡ иһә ҡаҙаҡ далаларына ҡасырға мәжбүр. Ҡаҙаҡ ханы Аблай һарайында йәшәп, ҡаҙаҡтар менән дау тотоп, бигерәк тә мәшһүр аһын Бохарҙы еңгән сәсәнгә Аблаев фамилияһы йәбешеүе сәйер түгел. Сәсән тормошон, ижадын төптән өйрәнеүсе оло рухлы уҡытыусы Искәндәр Миһранов фекеренсә, «Мифтахетдин Камалетдинов ҡаҙаҡ илендә Аҡмулла исеменә лайыҡ булған кеүек!»

Ил өсөн көрәштең иң ҙурҙарының береһе булған Салауат яуынан һуң да сәсән йәшенеп йөрөргә мәжбүр була. Ошо дәүерҙә, бәлки, уның Байназар тархан затынан булыуы ла онотолалыр.

«Башлыҡтары Пугачев та, Салауат менән Юлай ҙа, бары ла ҡулға алынған. Әлеге Байыҡ ҡартҡа тағы ла меҫкен ҡасҡын булып йөрөргә көн ҡалған. Артынан эҙәрләү төшкәс, кемгә генә барһа ла, бөтәһе лә уны ҡурсыуҙан ҡурҡҡас, Байыҡ бөтөнләй күҙ йырған» (М.Буранғолов. Сәсән аманаты. Өфө, 1995. 70-се б.). Дошманынан ҡасһа ла, сәсән ил көткән һүҙҙе әйтеүҙән ҡасмаған. Даръялай дарманлы, арыҫландай ҡаһарман йөрәкле, илде талаған дошманына ҡарата аяу белмәҫ аҫау ир өмөтһөҙлөк тигәнде белмәй. Яу баштары баш эйеп, батырҙар тынып, башҡаһы ҡурҡып ҡалғанда ла, үҙенең һүҙ ҡөҙрәтенең сикһеҙ икәнен әйтә ул:

Батырҙар юлын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған
Алдыңа килгән ҡарт, тирем,
Ат өҫтөндә сапҡанда,
Алдыңа дошман баҫҡанда,
Елем менән дошманды
Ҡолата килгән ҡарт, тирем! —

ти бит сәсән 1772 йылдарҙа ла. Бер уйлағанда, 1734 йылғы Байыҡ 40 йәштәрендә үҙен «ҡарт» тип әйтер инеме икән? Бәлки, ул үҙе әйтмешләй, 1812 йылда «йөҙ йәшемә еткәндә» тигәненә иғтибар итһәк — ысынлап 1712 йылда тыуғандыр. Асыҡлайһы мәсьәләләр бар әле.

«Маңлайында йөйө булған, тупыс бармаҡ, сал сәсле», ҡылыстай телле Байыҡ Айҙар сәсәндең мәшһүр рухы халыҡ хәтеренән юғалмай. Ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы дау күтәреп, ер-һыу талап, кеше хаҡын, дин-әхлаҡты боҙоу яғындағыларҙың ҡан дошман булыуын белдереп, йәнә, әҙәм милләте буйынса түгел, ә ниәте буйынса яманға һәм яҡшыға бүленгәнен асыҡлап, Байыҡ сәсән 1773 йылдағы Салауат яуына ла аныҡ, хаҡлы баһа бирә. Шуға ла ул үҙ һүҙенә ышандыра, өндәй, әйҙәй белгән харизматик шәхес, аҡыл һәм ҡоростай холоҡ эйәһе, айбар һәм дә ҡөҙрәтле һүҙ атаһы булараҡ Бүгәс ҡуптарған дау-яуға илдең күҙен аса.

Үҙе менән табаҡташ
Ҡан илаған урыҫты,
Татар, башҡорт, сыуашты
Әбей батша ҡулынан,
Уға табаҡташ булған
Баяр, тархан, бейенән

Азат итәм барын, тип,
Уҙаҡ йыйып ат менгән!
Алып килдем артынан
Бына уның яҙғанын:
«Азат булһын бары!» — тип
Илгә оран һалғанын, —

тип Бүгәстең кемлеген һәм яуының мәғәнәһен, асылын төшөндөрә сәсән.

Ғәбит сәсән Байыҡ сәсәндең тарихи мәлдәрҙә үҙенең ҡеүәтле һүҙе менән халыҡ күңеленә көслө йоғонто яһай алыу һәләтенә туҡтала. Шуға ла Байыҡ менән Бохар әйтеше, Салауат менән осрашыуы, ҡанлы яуға фатиха биреүе һәм күрәҙәләй аҡыл менән 1812 йылда Рәсәйгә биргән антҡа тоғро булыуҙы аңлатҡан мөрәжәғәт-ҡобайыры сәсән шәхесен асырға ярҙам итер поэтик документ була ала.

«Байыҡ — белемле кеше, көслө батыр һәм мәргән булған. Йыйындарҙа ул көрәшер ҙә, йырлар ҙа, уҡ атышыу ярыштарында мәргәнлек буйынса ла дан алыр булған» (Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Өфө, 1990. 326-сы б.). Ҡанһыраған, үсләнгән ил ниндәй юл һайларға белмәгән мәлдә сәсән һүҙе хәл иткес роль уйнай. Һәм ошо мөрәжәғәт-ҡобайыры менән Байыҡ үҙен халыҡ сәсәне, тыуған иленең гражданины итеп тә таныта.

1812 йылда оло яу ҡубыуын байҡап, гөж килгән майҙанға сыға ул. Рәсәйҙе яҡлап, антҡа тоғро булып изге яуға, бауыр башҡа булһа ла, дошман уртаҡҡа ҡаршы бер төптән ҡуптарылыуға өндәүсе Байыҡ һиҙгер фәйләсүф, тәрән аҡыл эйәһе һәм дипломат булараҡ та күҙаллана. Бер әсә ҡарынынан булған ғына туған булмаҫ, ә яңғыҙ бер үҙе ҡалһа, илдә таяныр терәге ҡалмаһа, ҡайһы ерҙең һыуын кем менән эсә — шуға бәндә туған була, бер тупраҡта тулаған, түлләгән, йәшәгән кешеләр бер-береһенә туған була тигән изге хәҡиҡәтте асып бирә Сәсән:

Аҡ батшаға ант биргән,
Ирҙәр менһен ат, тигән.
Батша бит һөрән һалған:
— Илде баҫты ят, — тигән.
Ант боҙғанға ни булыр?
...............................
Таяныр терәге юҡ булыр,
Ҡаңғырып йөрөр Байыҡтай,
Тынлыҡ тапмай, хур булыр…

Шулай ти 1812 йылда уҡ үҙен йөҙ йәшәр тип таныҡан Байыҡ Айҙар. Күп йәшәгән ни белгән, күпте күргән — шул белгән. 1553 йылда ант бирешкән Ил күпме михнәт күрһәтеп, яуҙа күпме ҡан ҡойҙорғанын яуыз Тәфтиләүҙең Башҡорт илен күҙ йәшендә, ҡанында ат йөҙҙөргәнен, 120 ауылды ҡыуҙай үртәп көйҙөргәнен күргән, урыҫ заводсыларының ил, ер-һыуҙы баҫып урлауына ла түҙгән, Бүгәс, Салауат ғәскәренең ҡанға батырылыуына иңрәгән, дәүер үтә килә «мал» тип ил ғәмен онотҡан башҡорт бейҙәре һәм тархандарҙың, ҡарт батырҙарҙың башын бәләгенә һалыуына ғәрләнгән һәм… яңғыҙ ҡалған сал сәсле сәсән Байыҡ әйтә был һүҙҙе. Урыҫ яманынан ил күргән ҡот осҡос яһиллыҡты кем-кем, ә сәсән белә! Белһә лә үс тураһында түгел,

көс тураһында һөйләй. Белһә лә ҙур һүҙҙең ҡыйыуын, асыуҙы артҡа, аҡылды алға ҡуйыуын әйтә.

«Сәләм бирһәм, алмаҫтай.
Һүҙемә ҡолаҡ һалмаҫтай.
Күҙгә сағыла күбегеҙ»,

— тигән тарихи майҙанда ҡурҡағы ла, бушағы ла, үслеһе лә, көслөһө лә булғандыр. Тик сәсәнде Башҡорт иле тағы тыңлағандыр:

Башыңа бәлә килгәндә,
Яман булһа ла күргәндә,
Үҙ туғаның шул яҡшы.
Ике туған талашыр,
Атҡа менһә — ярашыр.
Батшамы ул, кем булһын,
Шул тупраҡта түлләһен,
Илде ҡурсып үрләһен, —
Бер туғаның шул булыр!

Шулай итеп, Байыҡ сәсән Рәсәй менән Башҡорт иле араһында ят бауырлыҡҡа ҡарағанда туғанлыҡтың өҫтөнлөгөн күрә, уның изге көс икәнен асып бирә. Ҡасандыр «еләненең еләненән дошман ҡолатып йөрөгән» ғәскәри батыр кәрәк сағында сабыр аҡыл эйәһе, ҡөҙрәтле идеолог булараҡ күҙаллана. Баҡтиһәң, бер нисә ихтилалда ҡатнашып батырлыҡтар күрһәткән сәсән башҡорт милли азатлыҡ көрәшенең яугиры ла, идеологы ла, йырсыһы ла була бит!

Сәсән ҡәҙерен сәсән, һүҙ ҡәҙерен һүҙ оҫтаһы белер. Шуға ла Байыҡ Айҙар тураһында был риүәйәтте сәсәндәр бер-береһенә тапшырғанда ана шул изге вазифа — сәсән булыу вазифаһын, аманатҡа тоғро булғандай, тоғро әйтергә тырышҡандыр. Ҡасандыр үҙе тураһында Байыҡ Аблаев Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаевҡа, ә ул Ғәбит сәсән Арғынбаевҡа, ул иһә Мөхәмәтша сәсән Буранғоловҡа бәҫләп һөйләп биргән була (М.Буранғолов. Сәсән аманаты. Өфө, 1995. 351-се б.). Һәм бына бөгөн, бөйөк Байыҡтың тыуыуына 275 йылы яҡынлағанда, әүәле дәһшәтле мәлдә үҙе фатиха биргән бөйөк батыр Салауат рухы менән сәсән рухы ҡайтыуын тоябыҙ.

Сәсән ырыҫы шунда — ул үҙе генә үҙенең һынмаҫ ҡорос холҡон белә, тыумыштан үлмешкә ҡәҙәр үҙ вазифаһына ҡаҡшамаҫ тоғролоғон ярып әйтә ала. Шундай булыуы менән дә Байыҡ — 1812 йылдағы сал сәсле ҡарт сәсән — ҡаһарман милли холоҡ өлгөһө лә.

Арағыҙҙа кем булһын:
Тарханы булһын, бей булһын,
Миңә тимәһә, тау ярыр,
Ҡылыс тотҡан ир булһын.
Мин — уҙаман, тиерҙәй,
Һунарым алып, ҡарт булып,
Ҡанъяғаһын төйөрҙәй,
Түргә ултырып баш тотоп,
Баш ҡойҡаһын эйерҙәй,
Барыбер берәү табылмаҫ!
Булһа ла күҙгә сағылмаҫ,
Азамат булып танылмаҫ!

Күп йәшәгән ни белгән?
Күпте күргән, шул белгән! —

тип ҡәтғи әйтеп, үҙ ырыҫына, исем һәм есеменә ҡарата ихтирам нығыта ала ул. Бәлки, күп күргәненә ул үҙен йөҙйәшәр тигәндер. Бына ошонда һүҙ тигән ҡөҙрәттең ҡәҙерен, көсөн белеү һәм ғәҙеллек идеяһына тоғролоҡтоң сәсән өсөн ғүмер менән бер тиң булып, йәнәш булыуы атап әйтелә:

Шулай ҙа йөҙгә еткәндә,
Белгәнем әйтеп үтмәһәм,
Хатам күҙгә төрткәндә
Тағы ла әйтеп үлмәһәм,
Үле тәнем йыуылып,
Һыу менән генә аҡланмаҫ!
Яман аттан бүтәнен
Ил хәтерендә һаҡламаҫ!
Ҡәберем күргән — уба тир,
Иҫкә лә алмаҫ, һаҡламаҫ!

Сәсәндең «хатам» тигәне барыһынан биҙеп, ярһыу, илһөйәр йөрәген баҫа алмай, үсләнеп, төңөлөп, яңғыҙ ҡалып йөрөгәненә лә үкенеү булған түгелме икән? Нисек кенә булмаһын, әҙәмдән биҙгәндә лә илдән, хеҙмәтеңдән биҙеү хаталыр. Ни генә кисермә, меңдән берәү ил ғәмен боҙһа, ҡалғандары ла уға бер тиң, тип, ҡул һелтәп һығымта яһау ҙа хаталыр…

Яу ҡоралы — булат ҡылысы, дау ҡоралы — аҡыл ҡылысы. Йөрәктән әйткән һүҙ — таҙа, тәрән аҡыл һәм илһөйәрлеккә хаҡ билгелер. 1812 йылғы изге дауға ил күтәрелгәндә лә, «Кем ят, ә кем ант», «Кемгә ҡол кәрәк, ә кемгә — Тыуған ил» тигән һорауҙарҙы аралап бирә ул:

Ай, ант тигән, ант тигән,
Антың йотма, тот, тигән.
Ярлыҡамаҫ, ят, тигән,
Ятҡа анттан ҡайт, тигән.
Туғанға биргән аҡ антың
Менер аттай көт, тигән.
Олатайҙар дихайға
Мәскәүгә баш эймәгән,
Яҡла, тип Аҡ батшаны
Бушҡа тик ант бирмәгән!..

Ант биреү — башҡорт өсөн иң тәүҙә үҙенә тоғро булыуы шарты. Үҙ һүҙеңә тоғро булмаһаң — үлем. Йә мин (һүҙем), йә үлем — бына ошо тоғролоҡ, ireклек ҡануны. Әле булһа «йәмин әттем» тигән һүҙ бар халыҡта. «Аҡһаҡ ҡола» эпосында был ҡанун ифрат асыҡ әйтелә: үҙ һүҙендә тормаған егетте Аҡһаҡ ҡола тибеп үлтерә. Башҡалар ант боҙғанда ла башҡорт антын боҙмаған. Шуға ул — тарихта үҙ изге миссияһын үтәүсе аҫыл милләт, Уралда яҡшы уйлы, яңы уйлы Кешене барлыҡҡа килтерер өсөн йәшәгән ҡеүәтле, тәңреле халыҡ! Башҡорт халҡы үҙ күңеленән алда башҡалар күңелен күрә белеүе менән башҡа милләттәрҙән алдынғы. Тик был һыҙаттың аҡылы һәм самаһы булһын! Шуның өсөн дә яҡшылыҡ ҡылыу — ирек, яманлыҡ — ҡоллоҡ уға.

Был оран — Байыҡ һүҙе — әле лә бик көнүҙәк. Сәсән һүҙе — ил һүҙе, сәсән күҙе — ил күҙе һаман. Бар тыумышы, булмышы менән халыҡ улы, халыҡ сәсәне Байыҡ Айҙарҙың рухы күтәрелһен! Ошо маҡсат хаҡына эшләйһе эштәр ҙә күп. Мәҫәлән, Байыҡ Айҙар исемендәге сәсәндәр бәйгеһе ойоштороп, юбилейы айҡанлы (әгәр 1734 йылда тыуһа, 2009 йылда уға 275 йәш, 1710 йылда тыуһа, 2010 йылда тыуыуына 300, әгәр 1712 йылда тыуһа, быйыл 295 йыл була) бөтөн республика кимәлендә оло тантаналар үткәреү изге, хәйерле эш булыр ине.

Һүҙ, көй, бейеү оҫтаһы, аҡыл эйәһе, батыр, мәргән һәм сәсән ижадын, быуаттар аша Байыҡ исемен, есемен ҙурлаусылар, тағы бер ҡат уның мәшһүр рухына алғыш бағышлайыҡ!

Мәхмүт сәсән, Байыҡтың рухына тоғро булып, уның йырҙарын, ҡобайырҙарын башҡарып, ишеттереп йөрөгән. Шуға ла алтын аҡыл, тарихи факттарҙы быуаттар аша ижади еткергән был мираҫ — аманат һәм милли рухиәткә кәрәкле оло белем сығанағы ул.

Байыҡ Айҙарҙы башҡа сәсәндәрҙән айырмалы, үтә данлы иткәне — мәшһүр «Урал» халыҡ йырын сығарғаны. Урал йыры иң тәү «Йәйләүек», һуңынан «Ете ырыу», унан «Урал» булып киткән (М.Буранғолов. Сәсән аманаты. Өфө, 1995. 65-се б.). Күпте күргән, күпте белгән, ҡәҙимге кеше түгел, ә аһын рухын, сәсән ҡушйөрәген йөрөткән кеше бәйән итеп сығара ала был юлдарҙы:

Атам да һин, Урал, әсәм дә һин,
«Урал!» тиермен гүргә керһәм дә,
Атҡайҙарға менеп, яу сабырмын
Яулашырға дошман килгәндә!

Үҙ вазифаһына, унан бигерәк әруахтарға, ғәйре батырҙар эшенә, батырҙар гүренә тоғролоҡто ла аманат дәрәжәһендә йырҙа әйтә ала Сәсән:

Уралҡайҙан бейек тә, ай, тай булмаҫ,
Уралҡайҙы ла һөймәҫ ул булмаҫ.
Атҡайҙарға менеп тә һаҙаҡ алһам,
Дошмандарға ла унда юл булмаҫ.
Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы
Атай-олатайҙарҙың төйәге.
Уралҡайын һаҡлап яуға сапҡан
Батырҙарҙың ята ла һөйәге…

Ил һаҡлап башын һалған батырҙарҙың һөйәге ятҡан Урал — изге һәм тылсымлы, һәм берәү генә, берҙән-бер генә, башҡорт халҡының тыуған ере лә, мәңгелеккә барасаҡ гүре лә ул. Ошондай хистәрҙе, бөтөн башҡортта ла булған ғәзиз тойғоно бер итеп әйтә алыр тел эйәһе Байыҡ була. Мәхмүт сәсән һәр урында мәшһүр «Урал» йырын Байыҡ сығарғаны хаҡында әйтеп йырлай (М.Буранғолов. Сәсән аманаты. Өфө, 1995. 65-се б.).

Мәҙәниәт институтын асыу — бик көнүҙәк мәсьәлә. Башҡорттоң баш йырын тулғаған, һүҙе, көйө, холҡо менән башҡорт милли һынын үҙендә ҡуйған Байыҡ исемен уға биреүҙе кәрәкле, тәбиғи тип һанайым. Юғиһә, халыҡ ижадын сәхнәлә башҡарыу традицияһы көсәйгән мәлдә милли сәнғәт профессионалдарын тәрбиәләмәһәк, милли рухыбыҙ шишмәләре һайығыр.

Салауат районындағы Арҡауылдан йыраҡ түгел «Байыҡ ҡыуағы» һаман да үҙендә ҡасандыр мәшһүр сәсән йәшенеп ятҡанын әйтеп тора. Байыҡ Айҙарҙың һәм Мәхмүт сәсәндең изге ҡәберҙәре лә билдәле. Шуға ла сәсәндең тыуған ауылында, Салауат районы үҙәгендә һәйкәл асыу һәм урта мәктәпкә уның исемен биреү, ҡәберҙәрендә аят бағышлау, ҡорбан салыу оло сауап булыр ине.

Башҡорт халыҡ аҡылын һәм рәхмәтле хәтерен Байыҡ исеме һис ҡасан битараф ҡалдырмаҫ. Бөгөнгө көндә лә изге эш, ил эше тип көсөн йәлләмәй йәшәй илһөйәр уҡытыусы һәм тарихсы Искәндәр Миһранов. Ул етәкләгән «Байыҡ Айҙар сәсән» мәҙәни-иҗтимағи ойошмаһы (2006 й.) һәр йыл һайын «Байыҡ йомаһы», «Урал йыры» бәйгеләре ойоштора. Үҙ сиратымда ошо сараларҙы киңәйтеп тәҡдим итәм:

1. Мәшһүр сәсәнгә арнап республика күләмендә «Урал» башҡорт халыҡ йыры көнө, «Байыҡ йыйыны», «Байыҡ ижады» тигән конкурстар, балалар һәм өлкәндәр араһында башҡорт халыҡ ижады буйынса күп яҡлы бәйгеләр үткәреү кәрәкле (сәсәндәр, көйсөләр, бейеүселәр, йырсылар, уҡсылар ярышы).

2. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса уҡыу программаларына «Башҡорт сәсән мәктәбе» тигән курс индерергә һәм халыҡ сәнғәте өлгөләрен өйрәнеү, башҡарыу һәм пропагандалау йәһәтенән киләсәк быуынды тәрбиәләү системаһын камиллаштырырға (мәктәп һәм юғары уҡыу йорттары өсөн махсус программалар эшләп).

Тәҡдимдәр, уйҙар һәм ниәттәр күп. Иң мөһиме — быуаттар буйы үҙ милли сәнғәтендә, халыҡ ижадында үҫешкән, нығынған Башҡорт илен тамырҙарынан биҙҙермәй, традицион мәҙәниәт ҡомартҡыларының, алтын мираҫтың бәҫен төшөрмәй был заманда ла ҡәҙер итергә, тоғро булырға тейешлебеҙ. Юғиһә, заман шоу-бизнесында халыҡ сәнғәте яраҡлаштырыла, ябайлаштырыла, ҡәҙерһеҙләнә башланы. Республика мәҙәниәте эшендә башҡорт халыҡ ижады буйынса профессионалдар һәйбәтләп ылыҡтырылмау сәбәпле, этник билгеле ижадтың боронғоһон, мәңгелекле йөкмәткеһен, үҫешеү юлдарын, актуаллеген, заманса мөмкинлектәрен күҙаллау, ҡәҙерләү самалы әлегә. Улай ғына ла түгел, башҡорт халыҡ сәнғәтенә «икенсел», «ауыл сәнғәте», «примитивизм» тип скептик баһалауҙар һөҙөмтәһендә рәсми сәнғәт әһелдәре тарафынан системалы ҡарарҙар ҙа ҡабул ителмәй, талаптар ҙа ҡуйылмай. Ҡуйылһа ла, асылға тап килмәй. Шул сәбәпле бөтөн донъя, Европа классикаһына хас репертуар башҡорттоң оло сәхнәһенән халыҡ ижадын ҡыҫырыҡлай. Артабан иһә милли мәҙәниәтте ассимиляция, унификация һағалап ҡына тора. Бит глобализацияға ҡаршы тороуҙа замандонъяға ярарға тырышыу түгел, ә үҙең булып ҡалыу, миллилекте һаҡлау ғына көс була ала.

Милләт үҙен мәҙәни сәнғәте менән генә бәҫле, затлы һәм милли ҡаҙанышлы итеп донъяға таныта ала. Шуға күрә халыҡтан сыҡҡан сәсән, йырау, йырсы, бейеүсе, көйсө ижады — быуындан-быуынға тапшырылырға тейешле изге аманат. Милләттең йәшәү ҡануны ижады булыуға бәйле. Шул милли ижадты һаҡлау вазифаһын үтәгән мәҙәниәт прогрессив һанала, күптәр араһында берәү була ала.

Билдәлеләрҙең билдәлелеге үҙҙәренең ғүмеренән һуң да ижадында дауам итә. Ағымдағы йылдың апрель аҙағында Өфөлә «Байыҡ Айҙар

сәсән» мәҙәни-ижтимағи ойошмаһы менән «Салауаттар» яҡташтар йәмғиәте йыйыны үтте. Байыҡ сәсән рухына арналғайны ул. Йыйында төп докладсы Искәндәр Миһрановтың сығышы һәр кемде оло эштәргә дәртләндерҙе. Байыҡ сәсән ижадын, тормошон, сәсәнлек оҫталығын өйрәнеү буйынса тәҡдимдәр ҙә яңғыраны:

1. Башҡортостан Хөкүмәте ярҙамында төрлө ижтимағи ойошмалар менән бергә маҡсатлы биш йыллыҡ мәҙәни-ағартыу программаһын төҙөү.

2. Башҡорт дәүләт университетын йәки Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлаусы бер нисә студентты маҡсатлы аспирантураға аспирант итеп алыуҙы һорау һәм Байыҡ сәсән ижадын ғилми өйрәнеү.

Ошо тәҡдимдәргә ҡарата өҫтәлмә итеп мин шуны ла әйтер инем. Башҡорт сәсән мәктәбе — үҫешә барған традицион мәҙәни күренеш һәм ул йөмһүриәтебеҙҙең тарихи, ижтимағи тормошонда хәл иткес ваҡиғалар, сәйәси көсөргәнешлектәр һәм дә тантаналар осоронда үҙенең ыңғай йоғонтоһон ныҡлы һиҙҙерҙе.

Байыҡ сәсән һыны был мәктәптең төп шәхесе тиһәк тә артыҡ булмаҫ. Шуға ла Байыҡ сәсәндең тыуыуына 275 йыл тулыу уңайынан ижады һәм тормошона арнап ғилми-ғәмәли конференция үткәреү ҙә оло эш булыр. Хөкүмәткә был тәҡдим менән Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты мөрәжәғәт итте лә инде.

Байыҡ Айҙарҙың көйсө булыуы тураһында ла әйтелде. Миҫал итеп сәсәндең яҡташтары уның ижады тип һанаған тағы бер халыҡ йырын күрһәтәйек:

Йүрүҙәнкәй аша уҡтар аттым,
Былбыл тигән ҡошто уяттым.
Ал булмаһа, гөлдәр ҙә булыр,
Бәлки, рәхәт көндәр ҙә булыр.
Һеҙҙең өсөн генә йәндәр аттым,
Булманы шул осор ҡанатым.
Ал булмаһа, гөлдәр ҙә булыр,
Алда рәхәт көндәр ҙә булыр.
Егет кенә булһаң, бик егет бул,
Көмөш ҡуйҙыр ҡайыш йүгәнгә.
Егет кенә булып буйға еткәс,
Ҡояш булып йәйел йыһанға!

(Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты. Ҡулъяҙмалар бүлеге. 2 а, 113, 222-се б.).

Тимәк, профессиональ, композиторҙар тикшерһә, улар «Урал», «Тәфтиләү», «Азамат», «Егет кенә булһаң», «Һандуғас» йырҙарының көй тәбиғәтен, уртаҡ мелос алымдарын һәм көй идеяһын аса алыр, ижадсының һынын мөмкин тиклем тулыраҡ аныҡлай алыр ине.

Һәр яҡлап байҡағанда ла, Байыҡ Айҙар — мәшһүр сәсән, аҡыл эйәһе, халыҡ сәйәсмәне, дипломат, яугир-батыр, аҡһаҡал, көйсө, йырсы булып, башҡорт халҡының рухи маяғы булып ил хәтерендә һаҡлана. Шуға ла уның хеҙмәтен, ил ирке өсөн көрәшкән фиҙакәрлеген халыҡҡа яңынан асыу, данлау дәүере етте.